МУНИЦИПАЛЬ МӘКТӘПКӘСӘ БЕЛЕМ БИРЕҮ БЮДЖЕТ УЧРЕЖДЕНИЕҺЫ
БАЛА ҮҪТЕРЕҮ ҮҘӘГЕ – “АҠБУҘАТ” БАЛАЛАР БАҠСАҺЫ

Проект эше:

# "Йылҡысылыҡ"

Әҙерләне:
Тәрбиәселәр
Тулыбаева Г.Ғ.
Кулембетова Ф.Ш.

Сибай

Тәрбиәселәр:
Тулыбаева Гөлшат Ғиса ҡыҙы
Ҡоломбәтова Фидалиә Шәһит ҡыҙы
“Аҡбуҙат” балалар баҡсаһы

**Проект “Башҡорт халыҡ шөғөлө – йылҡысылыҡ”**
**Актуаллелеге:**
**Башҡорттар һәм йылҡысылыҡ**

Йылҡысылыҡ - борондан ҡалған, матди мәҙәниәтебеҙҙең ҙур өлөшөн тәшкил иткән тармаҡ. Башҡорттар биләгән ер үҙе үк йылҡысылыҡ өсөн уңайлы булған. Сәскәле болондар, ҡылғанлы далалар, ҡарҙан иң тәү әрселә торған түмәләсле яландар, ҡыш көндәре ышыҡланыу өсөн ҡалын урмандар йылҡысылыҡты үҫтереү өсөн бигерәк тә ыңғай шарттар тыуҙырған. Шуғалыр ҙа башҡорттар борон-борондан йылҡысылыҡ менән шөғөлләнгән. Атһыҙ башҡорт булмаған. Ҡайһы бер сығанаҡтарға ҡарағанда, 20-се быуатҡа хәтле башҡорттар йылҡыһыҙ йәшәмәгәндәр. Иң ярлы һаналған башҡорттоң да 15-ләп аты булған.

Башҡорт тормошон өйрәнеүсе И.Г.Георгиҙың яҙмаларында күрһәтелгәнсә, 18-се быуат аҙағында иң ябай башҡорттоң да 30-50 аты булған, күптәренең 500 башҡа еткән, байҙарҙың 1000, ҡайһыларының 2000 һәм унан да күберәк булған.

Башҡорт халҡының тарихы, ғөмүмән, йәшәйеше ат менән айырылғыһыҙ бәйләнгән. Ат кешене борон-борондан туйындырған, кейендергән, яуҙарҙа һаҡлаған. Ә инде бөгөнгө көндә йылҡысылыҡты үҫтереүгә ихтыяж бермә-бер үҫә. Әлеге ваҡытта Башҡортостан аттар һаны буйынса Рәсәйҙең башҡа төбәктәре араһында беренсе урынды алып тора. Тоҡомло аттар үрсетеү, йылҡы ите, ҡымыҙ етештереү агросәнәғәт комплексының өҫтөнлөклө йүнәлештәренең береһенә әүерелде.

Башҡорттарҙа башлыса ат өс йүнәлештә аҫыралған. Иң беренсе, әлбиттә ау өсөн. Улар айырым тотолған, өйөрҙәге иң етеҙ, йылдам аттар һайлап алынып, махсус рәүештә тәрбиәләнгән. Икенсе йүнәлеш: эш аттары.

Өсөнсөһө ит һәм һөт өсөн. Бейә һөтөнән шифалы эсемлек - ҡымыҙ яһалған. Итненән ҡаҙы әҙерләнгән.

**Башҡорт кымыҙы**

Башҡорттарҙа ҡымыҙ бешеү серҙәре ныҡлы һаҡланып, быуындан быуынға тапшырыла килә. Башҡорт тоҡомло бейәләр һөтөнән эшләнгән ҡымыҙ айырыуса сихәтле сифаттарға эйә. Үҙенең иҫтәлектәрендә яҙыусы, яҡташыбыҙ Сергей Аксаков былай тип яҙа:

*Яҙ етеп ер асылғас, туғай-болондар хуш еҫле йәшеллек менән капланғас та кышкыһынябыккан аттар тиҙ генә көрәйеп ала һәм башкорттар кымыҙ әҙерләү эшенә тотона. Бер аҙҙан йәш балаларҙан алып карыуы кайткан карттарға тиклем был шифалы эсемлекте эсә башлай. Аҙ ғына вакыт эсендә оҙон һалкын кышты аслы-туклы үткәреүҙән барлыкка килгән ауырыуҙары һыпырып алдандай юкка сыға. Кешеләрҙең ябығыуҙан һурыккан йөҙҙәре тулыланып, йәшәреп китә. Хатта сабыйҙарҙың, йәштәрҙең генә түгел, карттарҙың бит остарына алһыу төҫ куна.*

**Йылҡы ите — дауа**

Йылҡы ите — башҡорттарҙың иң яратҡан ризығы. Уның сәләмәтлеккә лә шифаһы ҙур.

Ул ғына ла түгел: аттар дарыуҙар яһауҙа туранан-тура ҡатнаша. Бактериология институттарында донор аттарҙың ҡанынан гангрена — тәндең үлекләүе, столбняк — һеңерҙәр тартышыу, дифтерия — балаларҙың тамаҡ сире, ботулизм — аҙыҡтан ағыуланыу кеүек ҡурҡыныс сирҙәргә ҡаршы дарыуҙар эшләнә.

**Проект төрө**: танып белеү
**Үткәреү ваҡыты:** оҙайлы
**Проектта ҡатнашыусылар:** балалар, ата-әсәләр (законлы вәкилдәр), тәрбиәселәр.

**Проект маҡсаты:** башҡорт халҡының шөғөлө – йылҡысылыҡ буйынса материалдар туплау һәм өйрәнеү;
**Проекттың бурыстары:**

- Балаларҙың башҡорт халҡының шөғөлө - йылҡысылыҡ буйынса белемдәрен киңәйтеү;
- Башҡорт халҡының йолалары, аштары менән таныштырыу;
- Балаларҙың актив һүҙлек байлығын арттырыу, телмәр, аң-зиһен, фекерләү ҡеүәһен үҫтереү;
- Йылҡы малына ҡарата һаҡсыл ҡараш формалаштырыу, иғтибар һәм һөйөү тәрбиәләү;

**Көтөлгән һөҙөмтә:** өйрәнелгән һәм тупланған материалдарҙан, ата-әсәләр менән берлектә, үҫтереүсе-предметлы мөхит булдырыу, “Ҡымыҙ байрамы” үткәреү.

**Ойоштороу этабы:**

**I этап:** Әҙерлек этабы

- Тема һайлау, маҡсат һәм бурыстар ҡуйыу;
- Йылҡысылыҡ тураһында материалдар туплау;
- Ата-әсәләрҙе йәлеп итеү, йыйылыш үткәреү;
- Әңгәмә ойоштороу;
- Сюжетлы-ролле, дидактик, хәрәкәтле һ.б. уйындар уйнау;
- Ата-әсәләр өсөн консультациялар әҙерләү;
- Төркөм бүлмәһендә шарттар булдырыу;

**II этап:** Төп этап
**Проектты тормошҡа ашырыу юлы**
**Проект темалары:**

1. Йылҡы донъя халыҡтары тарихында
2. Төҫтәре буйынса бүленеш
3. Йәштәре буйынса бүленеш
4. Ҡайһы бер атамалар
5. Һаны

6. Йылҡы – башҡорт мәҙәниәтендә
- Яу толпарҙары
- Башҡорт ҡымыҙы
- Ат тиреһенән эшләнгән һауыт-һабалар
- Йылҡы ите-дауа
- Башҡорт халҡында йылҡы образы
- Халыҡ ижады
  - Халыҡ әйтһә, хаҡ әйтә
  - Мәҡәлдәр
  - Эпостарҙан өлгөләр
- Геральдика

7. Атаҡлы ут ат
8. Ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр

**Проектты тормошҡа ашырыу юлы**

| № | Үҫеш өлкәләре | Тормошҡа ашырыу юлы | Тема |
|---|---|---|---|
| **Балалар менән эш** | | | |
| 1. | Телмәр үҫеше | Нәфис әҙәбиәт<br><br>Телмәр үҫтереү | А.Йәғәфәрова “Минең атым”<br>С.Ағиш “Турыҡай”<br>Г.Ғәлиева “Ҡымыҙ"<br>Ф.Туғыҙбаева “Аттар-ҡунаҡтар”<br>А. Игебаев “Аҡбуҙат”<br>Башҡорт халыҡ легендаһы “Йылҡысыҡҡан күле”<br>М.Клокова “Минең атым”<br>А.Боарьо “Минең атым”<br>Рус халыҡ әкиәте “Күгат”<br>Әңгәмә “Аттар”<br>Халыҡ ижады: мәҡәлдәр, әйтемдәр өйрәнеү, йомаҡтар сисеү һ.б. |
| 2. | Танып-белеү үҫеше | Тирә-йүн менән таныштырыу<br><br>Башланғыс ябай математик төшөнсәләр биреү | “Аттар”<br>Йылҡы – башҡорт мәҙәниәтендә”<br>Геральдика<br>Дидактик уйын “Нисә ат?” |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | | Төҫтәре буйынса бүленеш<br>Йәштәре буйынса бүленеш |
| 3. | Художестволы-эстетик үҫеш | Әүәләү<br>Һүрәтләү эшмәкәрлеге<br><br>Музыкаль эшмәкәрлек<br>Конструкторлау | “Ат дағаһы”<br>“Минең атым”, “Ат тиреһенән эшләнгән һауыт - һабалар”<br><br>“Толпар Аҡбуҙат ”<br><br>“Ат һарайы”<br>“Йорт хайуандары өсөн ҡура” |
| 4. | Социаль-коммуникатив үҫеш | Уйын эшмәкәрлеге<br><br><br><br><br><br>Видеояҙма, картина, иллюстрациялар ҡарау<br>Хеҙмәт эшмәкәрлеге<br>Хәүефһеҙлек нигеҙҙәре | Уйын – ситуация: “Ҡура боҙолдо”<br>Дидактик уйындар: “Нимәнең тауышы”, “Һәр аттың өйөн тап”,<br>“Парын тап”, “Нимә артыҡ” (ат дағаһы төҫтәр менән), “Ат ҡайҙа йәшенгән?”,“Ҡырҡылған һүрәттәр”, “Айырмаһын әйт”, “Ат ниндәй төҫтә?”<br>Сюжетлы-ролле уйын: “Минең ғаиләм”, “Ат ҡураһында” һ.б.<br>“Аттар донъяһында”<br><br>“Ат һарайын йыйыштырыу”<br>Уйын ситуациялар “Атҡа яҡын барма” һ.б. |
| 5. | Физик үҫеш | Хәрәкәтле уйындар<br>Тын алыу гимнастикаһы<br>Бармаҡ | “Аттар”, “Ат сабышы”<br>“Аттың ялына һәм ҡойроғона өрөү”<br><br>“Аттар сабышы” |

| | | | |
|---|---|---|---|
| | | гимнастикаһы<br>Артикуляцион гимнастика<br>Һау-сәләмәт йәшәү рәүеше | “Атта сабыу”<br>“Ҡымыҙҙың файҙаһы”<br>“Ҡаҙылыҡ” |

**Ата-әсәләр менән эш**

| № | Тема | Тормошҡа ашырыу юлы |
|---|---|---|
| 1. | “Кеше юлдашы - ат” | Ата-әсәләр йыйылышы |
| 2. | Ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр туплау | Папка-йәймә, фотоһүрәттәр менән альбом |
| 3. | “Башҡорт ҡымыҙы” | Консультация |
| 4. | “Башҡорт халҡының шөғөлө-йылҡысылыҡ” | Үҫтереүсе мөхит булдырыу, уйындар әҙерләү |
| 5. | Ҡымыҙ байрамы | Ҡымыҙ байрамын әҙерләп үткәреү |

**III этап:** Йомғаҡлау этабы

Ата-әсәләр менән берлектә үҫтереүсе -предметлы үҫеш мөхитен булдырыу, альбомдар эшләү, ҡымыҙ байрамы үткәреү.

**Иҫкәрмәләр**

1. Толковый словарь современного башкирского литературного языка. (под. ред З. Г. Ураксина, 2005)

**Сығанаҡтар**


- Башҡортостан. 26 декабрь 2013. Рәлис Ураҙғолов әҙерләгән материал.
- Ливанова Т. К., Лошади. — М.: ООО «Издательство АСТ», 2001. — 256 с. (рус.)
- Благовещен районының ижтимағи-сәйәси гәзите «Йәйғор». № 1 01.01.14 — 15.01.14


**Әҙәбиәт**


- *Матюшин Г. Н.* Археологический словарь. — М.: Просвещение: АО «Учеб. лит.», 1996. — 304 с.: ил. ISBN 5-09-004958-0.
- *Ливанова Т. К.*, Лошади. — М.: ООО «Издательство АСТ», 2001. — 256 с.
- *Энтони Д., Телегин Д. Я., Браун Д.*, Зарождение верховой езды // В мире науки, 1992. № 2.
- *Гамкрелидзе Т. В., Иванов В. В.*, Миграции племён — носителей индоевропейских диалектов — с первоначальной территории расселения на

Ближнем Востоке в исторические места их обитания в Евразии // Вестник древней истории, 1981. № 2.

- *Клягин Н. В.*, Происхождение цивилизации (социально-философский аспект), ЦОП Института философии РАН. — М., 1996.
- *Mircea Eliade*, Histoire des croyances et des idees religieuses. Tome I. De l'age de la pierre aux mystere d'Eleusis. P.: Payot, 1976. — М.: Критерион, 2002.
- *Галлямов С. А.* «Великий Хау Бен (Исторические корни башкордско-английского языка и мифологии)». — Издательство «Башкортостан»: Уфа, 1997, ISBN 5-8258-0098-0.
- *Deb Bennett* Conquerors: The Roots of New World Horsemanship — Solvang, CA: Amigo Publications, Inc., 1998. — 422 б. — ISBN 9780965853309. (инг.)
- *В.В. Калашников, И.Ф. Драганов, В.Г. Мемедейкин* Кормление лошадей: учебник. — М.: ГЭОТАР-Медиа, 2011. — 224 б. — ISBN 978-5-9704-1977-9.

**Һылтанмалар**

- *Лошади* — Ҙур совет энциклопедияһында мәҡәлә
- Лошадь домашняя — статья из Энциклопедии Кольера
- Лошадь домашняя — статья из Ветеринарного энциклопедического словаря
- Лошадь домашняя — статья из Большого энциклопедического словаря «Сельское хозяйство»
- Лошадь — статья из Археологического словаря (1998)
- Лошадь — статья из Большого лингвострановедческого словаря // М.: Государственный институт русского языка им. А. С. Пушкина. АСТ-Пресс. 2007.
- Лошадь — статья из словаря «Экология человека» // Ростов-на-Дону. Б. Б. Прохоров. 2005.
- Новое открытие: лошадей приручили предки казахов (bbc.co.uk)